Министерство науки и высшего образования Российской Федерации
ФГБОУ ВО «Уфимский университет науки и технологий»
Сибайский институт (филиал) УУНиТ
Педагогический факультет

УТВЕРЖДАЮ:

Декан ______ Л.Р.Файзуллина
*(подпись, инициалы, фамилия)*
«20» июня 2025 г.

РАБОЧАЯ ПРОГРАММА ДИСЦИПЛИНЫ

**МОРФОЛОГИЯ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА**
*(наименование дисциплины)*
ОПОП ВО **44.03.05 Педагогическое образование (с двумя профилями подготовки)**

Направленность (профиль) подготовки

**«Иностранный язык»**

Направленность (профиль) подготовки

**«Образование в области родного языка и литературы»**

форма обучения **очная**
*(очная, очно-заочная, заочная)*

Сибай – 2025

Рабочая программа составлена на основании учебного плана основной профессиональной образовательной программы 44.03.05 Педагогическое образование (с двумя профилями подготовки), направленность (профиль, специализация) «Иностранный язык», «Образование в области родного языка и литературы», одобренного ученым советом СИ (филиала) УУНиТ (протокол №8 от 19.03.2025) и утвержденного директором 19.03.2025.

| | | |
|---|---|---|
| Заведующий кафедрой русской, башкирской и зарубежной филологии<br>*(наименование кафедры разработчика программы)* | ________<br>*(подпись)* | Нургалина Х.Б.<br>(Ф.И.О.) |
| Разработчик программы | ________<br>*(подпись)* | Ласынова Н.А.<br>(Ф.И.О.) |
| Руководитель образовательной программы | ________<br>*(подпись)* | Нургалина Х.Б.<br>(Ф.И.О.) |

**1. Цель дисциплины. Перечень планируемых результатов обучения по дисциплине, соотнесенных с планируемыми результатами освоения основной профессиональной образовательной программы**

**1.1 Цель дисциплины**

Дисциплина «Морфология башкирского языка» относится к дисциплинам по выбору Блока 1 учебного плана данного направления подготовки. Дисциплина изучается на 5 курсе в 9 семестре очной формы обучения.

Цель дисциплины: осуществлять деловую коммуникацию в устной и письменной формах на государственном языке Российской Федерации и иностранном(ых) языке(ах), изучение лексикологии, фразеологии башкирского языка.

**1.2 Перечень планируемых результатов обучения по дисциплине, соотнесенных с планируемыми результатами освоения основной профессиональной образовательной программы**

Таблица 1. – Результаты обучения по дисциплине

| *Планируемые результаты освоения основной профессиональной образовательной программы (компетенции, закрепленные за дисциплиной)* | | *Код и наименование индикатора достижения компетенции, закрепленного за дисциплиной* |
|---|---|---|
| *код компетенции* | *наименование компетенции* | |
| УК-7 | Способен поддерживать должный уровень физической подготовленности для обеспечения полноценной социальной и профессиональной деятельности | УК 7.1. Знает: закономерности функционирования здорового организма; принципы распределения физических нагрузок; нормативы физической готовности по общей физической группе и с учетом индивидуальных условий физического развития человеческого организма; способы пропаганды здорового образа жизни |
| | | УК 7.2. Умеет: поддерживать должный уровень физической подготовленности; грамотно распределять нагрузки; вырабатывать индивидуальную программу физической подготовки, учитывающую индивидуальные особенности развития организма |
| | | УК 7.3. Владеет: методами поддержки должного уровня физической подготовленности; навыками обеспечения полноценной социальной и профессиональной деятельности; базовыми приемами пропаганды здорового образа жизни. |
| ОПК-6 | Способен использовать психолого-педагогические технологии в профессиональной деятельности, необходимые для индивидуализации обучения, развития, воспитания, в том числе обучающихся с особыми | ИОПК 6.1. Знать психолого-педагогические закономерности и принципы индивидуализации обучения, развития, воспитания, в том числе обучающихся с особыми образовательными потребностями; подходы к выбору и особенности использования педагогических технологий в профессиональной деятельности, необходимых для индивидуализации обучения в контексте задач инклюзии; теории социализации личности, индикаторы индивидуальных особенностей траекторий жизни, их возможные девиации; основы психодиагностики и основные признаки отклонения в развитии детей. |

| Планируемые результаты освоения основной профессиональной образовательной программы (компетенции, закрепленные за дисциплиной) | | Код и наименование индикатора достижения компетенции, закрепленного за дисциплиной |
|---|---|---|
| *код компетенции* | *наименование компетенции* | |
| | образовательными потребностями | ИОПК 6.2. Уметь разрабатывать и реализовывать индивидуальные образовательные маршруты, индивидуальные программы развития и индивидуально-ориентированные образовательные программы с учетом личностных и возрастных особенностей обучающихся; выбирать и реализовывать психолого-педагогические технологии в профессиональной деятельности, необходимые для индивидуализации обучения, развития, воспитания в контексте задач инклюзивного образования; оценивать их результативность; использовать конструктивные воспитательные усилия родителей (законных представителей) обучающихся, оказывать помощь семье в решении вопросов воспитания ребенка. |
| | | ИОПК 6.3. Владеть методами разработки (совместно с другими специалистами) программ индивидуального развития обучающегося; приемами анализа документации специалистов (психологов, дефектологов, логопедов и т.д.); технологиями реализации индивидуальноориентированных образовательных программ обучающихся. |

**2. Структура и трудоемкость дисциплины**

Общая трудоемкость (объем) дисциплины составляет **2** зачетные единицы (з.е.), **72** академических часов.

Таблица 2 – Объем дисциплины

| Виды учебной работы | Всего, часов | Количество часов в семестре |
|---|---|---|
| Общая трудоемкость дисциплины | 72 | 72 |
| Контактная работа обучающихся с преподавателем по видам учебных занятий (всего) | 40,2 | 40,2 |
| в том числе: | 40 | 40 |
| лекции | 16 | 16 |
| лабораторные занятия | 24 | 24 |
| практические занятия | - | - |
| Другие виды работ в соответствии с УП:<br>- эссе<br>- контрольная работа<br>- и др. | - | - |
| Самостоятельная работа обучающихся (всего) | 31,8 | 31,8 |
| Контактная работа по промежуточной аттестации | 0,2 | 0,2 |
| в том числе: | 0,2 | 0,2 |

| Виды учебной работы | Всего, часов | Количество часов в семестре |
|---|---|---|
| зачет | 0,2 | 0,2 |
| зачет с оценкой | - | - |
| курсовая работа (проект) | - | - |
| экзамен | - | - |

## 3. Содержание дисциплины

*Таблица 3 – Содержание дисциплины*

| № | Раздел (тема) дисциплины | Виды деятельности | | | | Формы текущего контроля успеваемости |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | Лек., час | Лаб. раб., час | Практ. раб., час | СРС, час | |
| 1. | Морфология. Исем | 2 | | 2 | 3 | ИЗ, СТ |
| 2. | Сифат | 2 | | 2 | 3 | ИЗ, СТ |
| 3. | Һан | 2 | | 2 | 3 | ИЗ, СТ, Т |
| 4. | Алмаш | 2 | | 2 | 3 | СТ, Т |
| 5. | Ҡылым | 2 | | 2 | 3 | СТ, Т |
| 6. | Рәүеш | 2 | | 2 | 3 | ИКР, Т |
| 7. | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Модаль һүҙҙәр | 1 | | 2 | 2 | ИЗ, СТ |
| 8. | Киҫәксәләр | 1 | | 2 | 2 | ИЗ, СТ |
| 9. | Теркәүестәр | | | 2 | 2 | ИЗ, СТ, Т |
| 10. | Бәйләүестәр | | | 2 | 2 | СТ, Т |
| 11. | Ымлыҡтар | 1 | | 2 | 2 | СТ, Т |
| 12. | Оҡшатыу һүҙҙәре | 1 | | 2 | 0,8 | ИКР, Т |

ИЗ-индивидуальное задание, СТ-словарь терминов, К – коллоквиум, Т – тестирование, Р – защита (проверка) рефератов, ИКР-индивидуальная контрольная работа, БРС – модульно-рейтинговая система

Таблица 4 – Лабораторные работы

| № | Наименование лабораторной работы | Объем, час. |
|---|---|---|
| 1. | | 2 |

Таблица 5 – Практические (семинарские) занятия

| № | Наименование практических занятий | Объем, час. |
|---|---|---|
| 1. | Морфология. Исем | 2 |
| 2. | Сифат | 2 |
| 3. | Һан | 2 |
| 4. | Алмаш | 2 |
| 5. | Ҡылым | 2 |
| 6. | Рәүеш | 2 |
| 7. | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Модаль һүҙҙәр | 2 |

| | | |
|---|---|---|
| 8. | Киҫәксәләр | 2 |
| 9. | Теркәүестәр | 2 |
| 10. | Бәйләүестәр | 2 |
| 11. | Ымлыҡтар | 2 |
| 12. | Оҡшатыу һүҙҙәре | 2 |
| Итого | | 24 |

## 4. Фонд оценочных средств для проведения промежуточной аттестации обучающихся по дисциплине

**Примерный перечень вопросов для лекций и семинаров**
**(9 семестр)**

**Исем.**

1. Морфология. Исем.
2. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
3. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр.
4. Исемдәрҙең һан категорияһы.
5. Исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категорияһы.
6. Исемдәрҙең килеш категорияһы.
7. Исемдәргә грамматик анализ.

**Сифат.**

1. Сифат. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
2. Төп һәм шартлы сифат.
3. Сифат дәрәжәләре, уларҙың яһалышы.
4. Сифаттарҙың исем урынында ҡулланылыуы.
1. Сифаттарға грамматик анализ.

**Һан.**

1. Һан. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
2. Һан төкөмсәләре: төп һандар, рәт һандары, бүлем һандары, сама һандары, йыйыу һандары, үлсәү һандары, кәсер һандары.
3. Ябай һәм ҡушма һандар. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.
4. Нумератив һүҙҙәр.
5. Һандарға грамматик анализ

**Алмаш.**

1. Алмаштарҙың грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
2. Алмаш төркөмсәләре: зат, күрһәтеү, һорау, билдәләү, билдәһеҙлек, юҡлыҡ, эйәлек алмаштары.
3. Алмаштарҙың грамматик категориялар менән үҙгәреше.
4. Алмаштарға грамматик анализ

**Ҡылым.**

1. Ҡылымдың грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
2. Ҡылымдың башланғыс формаһы. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.
3. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ, күсемлелек-күсемһеҙлек категориялары.
4. Затлы һәм затһыҙ ҡылымдар.
5. Ҡылымдың һөйкәлеш категорияһы. Бойороҡ һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
6. Шарт һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
7. Теләк-өндәү һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
8. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
9. Хәбәр һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
10. Хәбәр һөйкәлешендәге ҡылымдарҙың заман формалары: үткән заман, хәҙерге заман, киләсәк заман.
11. Ҡылымдың йүнәлеш категорияһы: төп, ҡайтым, төшөм, уртаҡлыҡ, йөкмәтеү үнәлештәре. Ҡайтым, төшөм, уртаҡлыҡ һәм йөкмәтеү йүнәлештәренең яһалышы.
12. Ҡылым төркөмсәләре: исем ҡылым, уртаҡ ҡылым, сифат ҡылым, хәл ҡылым. Ҡылым төркөмсәләренең зат менән үҙгәрмәүе.

13. Исем ҡылым. Унын мәғәнәһе һәм яһалышы. Исем ҡылымдың исемгә оҡшаш яҡтары: унын һан, килеш һәм эйәлек заты менән үҙгәреүе.
14. Уртаҡ ҡылым. Унын мәғәнәһе һәм яһалышы. Уртаҡ ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ формаһы, синтаксик роле.
15. Сифат ҡылым. Сифат ҡылымдың заман формалары, синтаксик роле. Сифат ҡылымдың исем урынында ҡулланылыуы.
16. Хәл ҡылым, унын мәғәнәһе. Хәл ҡылымдың төрҙәре һәм синтаксик роле. Ҡылымдарға грамматик анализ.

**Рәүеш.**

1. Унын грамматик мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре һәм синтаксик билдәләре.
2. Башҡорт телендә рәүештәр яһалыуҙың төп ысулдары.
3. Рәүеш төркөмсәләре: хәл, ваҡыт, урын, күләм-дәрәжә, оҡшатыу-сағыштырыу, сәбәп, маҡсат рәүештәре.
4. Рәүеш дәрәжәләре, уларҙың яһалышы. Рәүештәргә грамматик анализ.

**Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Модаль һүҙҙәр.**

1. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә, уларҙың үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмаһы.
2. Модаль һүҙҙәрҙең мәғәнәләре. Модаль һүҙҙәрҙең килеп сығышы һәм уларҙың синтаксик функциялары.
3. Модаль һүҙҙәрҙең төрҙәре.

**Киҫәксәләр.**

1. Киҫәксәләр тураһында дөйөм төшөнсә.
2. Киҫәксәләрҙең телмәрҙәге функцияһы.
3. Киҫәксәләрҙең бүленеше: һорау киҫәксәләре, көсәйтеү-раҫлау киҫәксәләре, сикләү киҫәксәләре.

**Теркәүестәр.**

1. Теркәүестәр тураһында дөйөм төшөнсә.
2. Составы буйынса теркәүестәрҙең бүленеше: ябай һәм ҡушма теркәүестәр.
3. Мәғәнәләре буйынса теркәүестәрҙең бүленеше: теҙеүсе һәм эйәртеүле теркәүестәр.
4. Теҙеүсе теркәүестәрҙең төркөмдәре: йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү, аныҡлау теркәүестәре.
5. Эйәртеүле теркәүестәрҙең төркөмдәре: шарт, сәбәп, һөҙөмтә, оҡшатыу теркәүестәре

**Бәйләүестәр.**

1. Бәйләүестәр тураһында дөйөм төшөнсә.
2. Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге функцияһы.
3. Бәйләүестәрҙең бүленеше: төп йәки эйәлек килештәге һүҙҙәр менән килгән бәйләүестәр, төбәү йәки төп килештәге һүҙҙәр менән килгән бәйләүестәр.

**Ымлыҡтар.**

1. Ымлыҡтар. Ымлыҡтарҙың телмәрҙәге функцияһы.
2. Ымлыҡтарҙың бүленеше һәм дөрөҫ яҙылышы.

**Оҡшатыу һүҙҙәре.**

1. Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында дөйөм төшөнсә.
2. Оҡшатыу һүҙҙәренең төрҙәре.
3. Оҡшатыу һүҙҙәренең төҙөлөшө һәм уларҙың синтаксик функциялары

**Критерии оценки (в баллах):**

| Количество баллов | Критерии оценивания на вопросы для аудиторной работы |
|---|---|
| 2 | При ответе студент демонстрирует свободное владение заявленной проблемой, умение грамотно использовать понятийный аппарат в рамках рассматриваемого вопроса, не использует конспект семинарского занятия как план при ответе. |
| 1 | При ответе на вопрос студентом допущено несколько существенных ошибок в толковании основных понятий. Логика и полнота ответа страдают заметными изъянами. Имеются принципиальные ошибки в логике построения ответа на вопрос. |
| 0 | Дан в целом неверный ответ |

**Задания для контрольной работы**

**Контрольная работа № 1.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһарға, һүҙ составын билдәләргә.

*Күп тә үтмәне, ҡайҙандыр ҡалҡып сығып өлгөргән ваҡ болоттар, бергә ҡушылып, ер тетрәтергә, уттарын сәсергә тотондолар.* (И. Насыри).

2. Бер ҡушма һан алып, унан мөмкин тиклем төрлө юл менән яһалған сама һандары яҙығыҙ.

3. Ике төп (хәл) һәм ике ваҡыт рәүеше алып, уларҙың дәрәжә формаларын яҙығыҙ, бер-икеһе менән һүҙбәйләнеш төҙөгөҙ.

4. «Туғандар» һүҙен эйәлек категорияһы затының берлек һәм күплек формаларында үҙгәртергә.

5. Сифат урынында ҡулланылыусы күрһәтеү алмаштары менән ике һөйләм яҙығыҙ.

**Контрольная работа № 2.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*Беҙҙең быуын өсөн Ватан тағы шуға икеләтә ғәзиз: уның именлеге өсөн күп атайҙар менән ағайҙар ғүмерҙәрен бирҙеләр.* (М.Кәрим).

2. Бер сама һаны менән ҡушма уртаҡлыҡ исемдән һүҙбәйләнеш төҙөп, килеш менән үҙгәртегеҙ.

3. Эйәлек категорияһының III зат формаһындағы бер һорау алмашын эйәлек һәм төбәү килештәрҙә алып,берәр һөйләм яҙығыҙ.

4. Тамыр, яһалма һәм парлы рәүештәргә икешәр ми1ал яҙып, уларҙың ниндәй мәғәнәүи төркөмгә ҡарағанлығын әйтегеҙ, берәүһенең дәрәжә формаларын бирегеҙ.

5. Коллектив (төркөмлө) күплекте аңлатыусы исем менән һөйләм яҙығыҙ.

**Контрольная работа № 3.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*Нисектер ҡыҙыңдың исеме,*
*Белмәйем, ҡорҙаш, уны;*
*Тик беләм: ул - алма битле,*
*Һәм бик бәләкәй ҡулы.* (Р.Ниғмәти).

2. Предметтың, хәл-күренештең билдәле бер урынға һәм ваҡытҡа ҡарағанлығын белдереүсе икешәр сифат яҙығыҙ. Уларҙың ниндәй сифат икәнен әйтегеҙ.

3. Төрлө юл менән яһалған 3 юҡлыҡ алмашы яҙығыҙ, береһен килеш менән үҙгәртегеҙ.

4. Нумератив һүҙҙәр менән биш һүҙбәйләнеш яҙығыҙ.

5. «Ҡәнәғәт» һүҙен хәбәрлек категорияһының зат формаларында яҙығыҙ, береһе менән һөйләм төҙөгөҙ.

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания контрольной работы | Количество баллов |
|---|---|
| Студент выполнил работу без ошибок и недочетов; допустил не более одного недочета | 5 |
| Студент выполнил работу полностью, но допустил в ней не более одной негрубой ошибки и одного недочета или не более двух недочетов; | 4 |
| Студент правильно выполнил не менее половины работы или допустил: не более двух грубых ошибок; или не более одной грубой и одной негрубой ошибки и одного недочета; или не более двух-трех негрубых ошибок; или одной негрубой ошибки и трех недочетов; или при отсутствии ошибок, но при наличии четырех-пяти недочетов; | 3 |
| Студент правильно выполнил менее половины работы | 2 |

**Задания для письменных работ**
**Морфология башкирского языка**

1. **Бирелгән һүҙҙәрҙе тейешле формаларҙа үҙгәртегеҙ. Һөйләм төҙөгөҙ.**

*Йөрәк* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 1-се зат берлеге, сығанаҡ килештә.

*Сәскә* - күплек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төбәү килештә.

*Кеше* – күплек һанда, эйәлек категорияһының 2-се зат күплеге, төшөм килештә.

*Йондоҙ* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 2-се зат берлеге, хәбәрлек категорияһының 1-се зат берлеге.

*Күҙ* – күплек һанда, эйәлек категорияһының 1-се зат берлеге, төбәү килештә.

*Юл* – күплек һанда, төп килештә.

*Моң* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төшөм килештә.

*Шишмә* - берлек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төп килештә.

2. **Бирелгән һүҙҙәрҙе килештә үҙгәртегеҙ:**

Киоск, митинг, танк, ландшафт, Кирилл, Минск, кросс, жюри, автомобиль, лагерь, кафе, Юлдашев, артист, Брест, меню, металлург, БР.

**3. Текстан сифаттарҙы табып, уларҙың дәрәжәләрен билдәләгеҙ.**

Ныҡлы кәүҙәһенә килешеп торған зәңгәрһыу төҫтәге плащының яғаһындағы урмансы петлицаһына өсәр эре йондоҙ беркуетелгән ир машинанан төштө. Яланбаш. Ҡап-ҡара ҡуйы сәстәре тигеҙ итеп ҡырлған ҡалын елкәһенә табан ишелеп-бөҙрәләнеп барып бөтә. Саҡ ҡына көмрөрәк тура танау, сирыш әҫәре булмаған ихтыяри йөҙ... (Н. Мусин.)

**4. Өҙөктән һандарҙы табып, төркөмсәләрен, яһалыштарын билдәләгеҙ. “Бер генә тапҡыр” һүҙбәйләнештәренең нисә тапҡыр һәм ни өсөн шул тиклем ҡабатланып килеүенең сәбәбен аңлатығыҙ.**

...Бер тапҡыр ҡалас ашау өмөтө менән беҙ егерме биш саҡрым ергә йәйәү барырға әҙербеҙ. Тамаҡ һаулыҡмы, ҡомһоҙлоҡмо, иҫәрлекме был? Әллә башҡа берәй нәмәме? Мин хәҙер үткән ғүмерҙең сал түбәһенән артҡа әйләнеп ҡарайым да шундай фекергә киләм: хикмәт беҙҙә, беҙҙең рухта булған. Ун михнәттең араһында бер рәхәттең ҡәҙерен, йөҙ әсенең эсендә бер татлының тәмен белеп үҫкәнбеҙ беҙ. Шуға күрә лә һуңыраҡ, башҡа аң, йөрәккә дәрт ингәс тә, беҙ әсәйҙәребеҙҙең бер фатихаһы хаҡына мең һынау үтергә әҙер булдыҡ; һөйгәндәребеҙҙең күҙҙәренә тик бер генә тапҡыр тултырып ҡарау өсөн, күкрәктәрҙәге асыҡ яраларҙы устарыбыҙ менән ҡыҫып, меңәр саҡрымлыҡ араларҙы араға һанамай, һуғыш яланынан бер генә көнгә, бер генә сәғәткә тыуған төйәктәребеҙгә ынтылдыҡ. Һәм, аҙаҡ килеп, Тыуған илдең бер генә ус тупрағы, бер генә тамсы һыуы, бер генә һулам һауаһы өсөн, Ватан ҡабул иткән саҡта, бөп-бөтөн көйө ғүмерҙәребеҙҙе бирҙек... (М.Кәрим)

**5. Түбәндә бирелгән нумератив һүҙҙәрҙе ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.**

Бәйләм, грамм, дана, киҫәк, күтәрем, ҡалаҡ, ҡарыш, ҡосаҡ, өйкөм, өйөм, саҡрым, телем, тотам, ус, һынығ, эҫкерт.

**6. *Кем, нимә, теге* алмаштарын күплектә килеш менән үҙгәртеп яҙығыҙ. Береһен эйәлек, икенсеһен сығанаҡ, өсөнсөһөн төшөм килештә килтереп, өс һөйләм төҙөгөҙ.**

**7. Түбәндәге ҡылымдарҙың башланғыс формаһын билдәләгеҙ:** алыҫайыу, асыу, баулау, бәхәсләшеү, инеү, йөрәкһеү, күгәреү, ҡулланыу, уҡыу, шатланыу, әйтеү, йылмайыу, көрһөнөү, ашығыу, уйлау, көрәшеү, теҙләнеү.

**8. Ҡылымдарҙы тейешле грамматик категорияларҙа үҙгәртегеҙ, һөйләмдәр төҙөгөҙ.**

*Төш* – барлыҡта төп йүнәлештә хәбәр һөйкәлеше шаһитлы үткән заман 1-се зат берлектә.

*Кур* – бойороҡ һөйкәлеше 3-сө зат берлектә юҡлыҡта төп йүнәлештә.

*Көт* – шарт һөйкәлеше 2-се зат берлектә төп йүнәлештә

*Эҙлә* - хәбәр һөйкәлеше шаһитһыҙ үткән заман 2-се зат күплектә юҡлыҡта уртаҡлыҡ йүнәлешендә.

*Йырла* – үткән заман сифат ҡылым йөкмәтеү йүнәлешендә..

*Түҙ* – хәбәр һөйкәлеше билдәһеҙ киләсәк заман 1-се зат берлектә төп йүнәлештә.

*Уҡы* – юҡлыҡта хәбәр һөйкәлеше шаһитлы үткән заман 2-се зат күплектә йөкмәтеү йүнәлешендә.

*Йыу* – барлыҡта исем ҡылым ҡайтым йүнәлешендә.

*Ҡурҡ* – юҡлыҡта йөкмәтеү йүнәлешендә уртаҡ ҡылым.

*Һөйлә* - барлыҡта хәбәр һөйкәлеше хәҙерге заман 2 –се зат берлектә төп йүнәлештә.

**9. Текстан рәүештәрҙе һәм улар эйәреп килгән һүҙҙәрҙе табып, яҙып алығыҙ, һәр бер рәүештең ниндәй төркөмсәнән икәнен әйтегеҙ.**

Көн буйы яуған ямғыр кискә ҡарай ҡапыл туҡтаны. Китмәҫкә килгәндәй түшәлеп торған болоттар әллә ни арала таралып та өлгөрҙө. Зәңгәр күккә ҡояш яңынан хужа булды. Тик ҡайҙалыр бейектә аҙашып ҡалған һуңғы тамсылар һирәк-мирәк тамғылап ҡуя.

Өй янындағы бүрәнә өҫтөндә Айҙар менә Ғабдулла байтаҡтан бирле һүҙһеҙ ултыра. Малайҙарҙың кәйефе һүрән күренә. Эшһеҙ ҡалған кешеләр шундайырыҡ булалар шул.

Айҙар һеңлеһе Гөлнурҙы саҡырып алды ла Яҡупты тиҙ генә алып килергә ҡушты. Ялан аяҡтары менән бысраҡҡа сәпелдәтә-сәпелдәтә, Гөлнур Яҡуптарға ҡарай шәп итеп йүгерҙе.(М. Кәрим.)

**10. Күп нөктәләр урынына мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ.**

Әле генә имән төбөндәге эскәмйәләрҙәге сүп-сарҙы һепереп ташланым, ..., был эште миңә анау күгәрсен күҙҙәре ҡушты. ..., башта уларҙың сафлығына һоҡланып ҡарап торҙом да, үҙем һиҙмәҫтән ҡулыма һепертке алдым. Һеперткегә мин былай һирәк тотонам. Донъя сүбен бер мин генә һепереп бөтөрә алмам, тим.

Ваҡ-төйәк нәмәләрҙең онотолмауы тураһындағы фекргә шуны өҫтәргә ...: күп йәһәттән хикмәт ваҡиғаларҙың ниндәй булыуында ..., һинең рухыңдың, аңыңдың, хәтерләү аппаратыңдың нисек, ниндәй тулҡынға көйләнеүендә. Улар бәғзе нәмәләрҙе ғүмерлеккә үҙләштереп ҡала, нимәләрҙелер үткәрә лә ебәрә. (М.Кәрим.)

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания решения расчетных задач | Количество баллов |
|---|---|
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 80%; | 3 |
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 60%; | 2 |
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 50%; | 1 |
| Имеются существенные ошибки в логическом рассуждении и в решении; отсутствует ответ на задание. | 0 |

**Примерные тестовые задания**

1. *Һөйләшер һүҙ күп әле.* Был һөйләмдә сифар ҡылым ниндәй заманды белдерә:
   а) Хәҙерге заман сифат ҡылым
   б) Үткән заман сифат ҡылым
   в) Киләсәк заман сифат ҡылым
   г) Шаһитлы үткән заман
   д) Билдәһеҙ киләсәк зама
2. *Ошо ергә былтыр ҙа еләккә килгәйнек.* Был һөйләмдә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:
   а)Зат алмашы
   б) Күрһәтеү алмашы
   в) Һорау алмашы
   г) Юҡлыҡ алмашы
   д) Билдәһеҙлек алмашы
3. *Ап- аҡ, ифрат матур* сифаттары ниндәй дәрәжәлә?
   а) Төп дәрәжәлә
   б) Сағыштырыу дәрәжәһе
   в) Артыҡлыҡ дәрәжәһе
   г) Аҙһытыу дәрәжәһе
   д) Дәрәжәһе юҡ
4. Һандарҙа ялғауҙарҙың яҙылышы ҡағиҙәгә тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ:
   а) 23-сө апрель
   б) 1950-се йыл
   в) 1-се һанлы интернат –мәктәп
   г) 12-нсе рәт
   д) XX –се быуат
5. *Уларға бары дөрөҫөн генә әйтһендәр.* Был һөйләмдә ҡылымды табып, уның һөйкәлешен билдәләгеҙ:
   а) Хәбәр һөйкәлеше
   б) Бойороҡ һөйкәлеше
   в) Теләк һөйкәлеше

г) Шарт һөйкәлеше
д) Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

6. *Башҡортмон* һүҙендә ниндәй категория ялғауы бар?
а) Эйәлек заты ялғауы
б) Хәбәрлек заты ялғауы
в) Килеш ялғауы
г) Күплек ялғауы
д) Ялғау юҡ

7. Теркәүестәр бирелгән юлды билдәләгеҙ
а) һәм, тағы, йәки, йә булмаһа, әммә, ләкин +
б) менән, өсөн, кеүек, һымаҡ, шикелле, һайын
в) ҡына, кенә, шыр, дөм, дәбаһа

8. Бәйләүестәр бирелгән юлды билдәләгеҙ
а) һәм, тағы, йәки, йә булмаһа, әммә, ләкин
б) менән, өсөн, кеүек, һымаҡ, шикелле, һайын +
в) ҡына, кенә, шыр, дөм, дәбаһа

9. *Килде – килгән – килә - киләсәк – килер*. Ҡылымдың ниндәй формаларына миҫалдар бирелгән?
а) ҡылымдың һөйкәлеш формалары
б) ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ формалары
в) ҡылымдың йүнәлеш формалары
г) ҡылымдың заман формалары

10. *Бөтәһендә һинең ҡатнашың бар, Таш актарыу, ойоҡ бәйләүҙә, Йыһандарға осоу, ер һөрөүҙә, Мал көтөүҙә алыҫ йәйләүҙә*. Һөйләмдә ҡылымдың ниндәй төркөмсәһенә миҫалдар бар?
а) исем ҡылым
б) хәл ҡылым
в) сифат ҡылым
г) уртаҡ ҡылым

11. Ҡылымға хас грамматик категорияларҙы билдәләгеҙ:
а) һан, килеш, эйәлек категориялары
б) һан, зат, килеш, хәбәрлек категориялары
в) дәрәжә категорияһы
г) һан, зат, заман, һөйкәлеш, йүнәлеш, күләм категорияһы

12. Йөкмәтеү йүнәлеше ҡылымдары бирелгән юлды билдәләгеҙ.
а) уҡый, яҙа, йыуа, килә, китә
б) сабырһыҙлана, кейенә, биҙәнә, ҡысҡырына
в) йыуыла, төҙөлә, биҙәлә, уҡыла
г) эшләтә, яҙҙыра, көлдөрә, маҡтандыра

13. *Айырылған ҡаҙ тупланған ҡарғаға ем булған* һөйләмендә ҡылымдарҙың ҡайһыһы – сифат ҡылым, ҡайһыһы – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы?
а) айырылған, тупланған – сифат ҡылымдар, булған – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы.
б) айырылған, тупланған – хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, булған – сифат ҡылым.
в) айырылған, булған – сифат ҡылымдар, тупланған – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы.
г) айырылған, булған – сифат ҡылымдар, тупланған – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы.

14. *Артабан әҙәм аяғы баҫмаған урмандар башлана* (Ж. Кейекбаев) һөйләмендә ҡылымдың заман формаһын билдәләгеҙ:
а) шаһитлы үткән заман
б) шаһитһыҙ үткән заман
в) хәҙерге заман
г) билдәле киләсәк заман

15. *Кем аҡыллыраҡ, шул пирамиданың башына менеп ултыра* (Р.Солтангәрәев) һөйләмендәге һүҙҙәргә бирелгән грамматик анализдарҙың ҡайһыһы кем һүҙен асыҡлай?
а) алмаш, исемде алмаштырған, һорау алмашы, берлек һанда, төп килештә, һөйләмдә эйә булып килгән.
б) алмаш, исемде алмаштырған, күрһәтеү алмашы, берлек һанда, төп килештә, һөйләмдә эйә булып килгән.
в) алмаш, сифатты алмаштырған, күрһәтеү алмашы, һөйләмдә аныҡлаусы булып килгән.
г) исем, тамыр исем, уртаҡлыҡ исем, берлектә, эйәлек килештә, аныҡлаусы булып килгән.

16. Күплек мәғәнәһен белдереүсе исемде табығыҙ:

а) Сағыу ҡояш нурын һибә.

б) Был баланы бәләнән нисек йолоп алырға.

в) Азат гармунда матур уйнай.

г) Ул йәслелә бала ҡарай.

17. Аҫтына һыҙылған исемдең килешен билдәләгеҙ: *<u>Ҡала</u> баҡсаһында осрашырға һүҙ ҡуйышты*.

а) төп килеш

б) эйәлек килеш

в) төшөм килеш

г) төбәү килеш

18. *Күңелем йырға һыуһаһа, һайрар ҡошом һин, <u>күңелем</u> бойоҡһа, йыуанысым, моңдашым һин, тыуған Башҡортостан!* (М. Сиражи) Аҫтына һыҙылған исемдең затын билдәлә:

а) I эйәлек заты

б) II эйәлек заты

в) III эйәлек заты

г) I хәбәрлек заты

19. Шартлы сифатты күрһәтегеҙ:

а) йылыраҡ көн

б) ағас өй

в) ҙур ҡала

г) һарғылт урман

20. *Беҙҙең алда йөҙҙәрсә сакрымдарға һуҙылған дала йәйрәп ята ине.* Һөйләмдәге һандың төркәмсәһен билдәләгеҙ:

а) төп һан

б) рәт һаны

в) бүлем һаны

г) сама һаны

21. Ҡайһы һандың яҙылышы ҡағиҙәгә тап килә:

а) 12 февраль

б) III-сө синыф

в) 7, 8 кеше

г) йыйылыш 6 башлана

22. *Кластағы бөтә кеше саңғы ярышында ҡатнашты.* Алмашты табып, төркәмсәһен билдәләгеҙ:

а) зат алмашы

б) күрһәтеү алмашы

в) һорау алмашы

г) билдәләү алмашы

23. Үткән заман сифат ҡылым ҡулланылған һөйләмде табығыҙ:

а) Мәҙәниәтте бөтөрөү өсөн большевиктарҙың тырышлығы юҡҡа сығасаҡ, һәм мәҙәниәт яңы көс менән алға китәсәк. (Ә.Вәлиди Туған)

б) Иҙәнде һарыға, стеналарҙы зәңгәргә буяғас, өй эсе күркәмләнеп китте.

в) Күргәндәр, моғайын, — күрмәмешкә, ишеткәндәр — ишетмәмешкә, белгәндәр — белмәмешкә һалышты. (М.Кәрим)

г) Баҙарҙарҙа бара күңел талау, Баҙарҙарҙа бара йән һатыу. (Р.Бикбаев)

24. Ҡайтым йүнәлешендә тороусы ҡылымды күрһәтегеҙ:

а) инша яҙыш

б) ҡаланы күрһәтә

в) ҡыҙыңды күр

г) төлкөләй биҙәнгән

25. Яһалма рәүеште билдәләгеҙ:

а) хәҙер

б) күрәләтә

в) баш түбән

г) быйыл

26. Аҫтына һыҙылған һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмө булыуын билдәләгеҙ: *Ауыл <u>һайын</u> туктап,*

*йылына-йылына ике көндән артыҡ килдек.*

а) рәүеш

б) теркәүес

в) киҫәксә

г) бәйләүес

27. *Сәрбиямал, ни өсөндөр, бөтә **иғтибарын**... Емешкә йүнәлтте* (З. Биишева). Билдәләнгән һүҙҙең килешен билдәләгеҙ.

а) эйәлек килеш;

б) төшөм килеш;

в) төбәү килеш

г) сығанаҡ килеш.

28. *Ҡайһығыҙҙың тәүәкәллеге етер икән был эшкә?* Һорау алмашы ниндәй ялғауҙар ҡабул иткән.

а) күплек һәм килеш ялғауы;

б) эйәлек килеш ялғауы һәм хәбәрлек заты ялғауы;

в) хәбәрлек заты ялғауы һәм сығанаҡ килеш ялғауы;

г) эйәлек заты ялғауы һәм эйәлек килеш ялғауы.

29. *Донъяла һинән дә бәхетлерәк, һинән дә матурыраҡ бер кем юҡ* һөйләмендә ҡылым ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?

а) эйә

б) хәбәр

в) был һөйләмдә ҡылым юҡ

г) аныҡлаусы

30. Билдәләү алмаштары бирелгән юлды билдәләгеҙ

а) әллә ҡайҙа, әллә кем, теләһә нимә

б) һис ниндәй, бер кем дә, бер ҡасан

в) минеке, уларҙыҡын, һинекенә

г) бар, барыһы, һәммәһе +

**Критерии оценки (в баллах):**

| Процент правильных ответов | Количество баллов |
|---|---|
| 85 - 100 % | 3 |
| 65 - 84% | 2 |
| 45 - 64% | 1 |
| менее 45% | 0 |

## Творческие задания

1. Тамыр, яһалма, ҡушма, сифаттарҙы файҙаланып, иптәшегеҙгә тасуирлама яҙығыҙ
2. Нумератив һүҙҙәр менән бәйләнешле текст уйлап яҙығыҙ.
3. Ҡылымдың төрлө формаларына миҫалдар булған әҙәби әҫәрҙән өҙөк табығыҙ.
4. Алмаштың төрлө төркөмсәләренә миҫалдар булған әҙәби әҫәрҙән өҙөк табығыҙ.

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания отчета | Количество баллов |
|---|---|
| Студент предоставил письменную работу и ответил на все вопросы преподавателя по теме, возможно наличие недочетов | 1 |
| Студент не предоставил письменную работу и ответил на все вопросы преподавателя по теме | 0 |

## Примерный перечень вопросов к зачету
## 9 семестр

1. Морфология. Үҙаллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.
2. Исем. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
3. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр.
4. Исемдәрҙең һан категорияһы.
5. Исемдәрҙең эйәлек категорияһы.

6. Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы.
7. Исемдәрҙең килеш категорияһы.
8. Сифат. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
9. Төп һәм шартлы сифаттар.
10. Сифат дәрәжәләре, уларҙың яһалышы.
11. Сифаттарҙың исем урынында ҡулланылыуы.
12. Һан. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
13. Һан төкөмсәләре: төп һандар, рәт һандары, бүлем һандары, сама һандары, йыйыу һандары, үлсәү һандары, кәсер һандары.
14. Ябай һәм ҡушма һандар. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.
15. Нумератив һүҙҙәр.
16. Алмаштарҙың грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
17. Алмаш төркөмсәләре: зат, күрһәтеү, һорау, билдәләү, билдәһеҙлек, юҡлыҡ, эйәлек алмаштары.
18. Алмаштарҙың грамматик категориялар менән үҙгәреше.
19. Ҡылымдың грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
20. Ҡылымдың башланғыс формаһы. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.
21. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ, күсемлелек-күсемһеҙлек категориялары.
22. Затлы һәм затһыҙ ҡылымдар.
23. Ҡылымдың һөйкәлеш категорияһы. Бойороҡ һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
24. Шарт һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
25. Теләк-өндәү һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
26. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
27. Хәбәр һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
28. Хәбәр һөйкәлешендәге ҡылымдарҙың заман формалары: үткән заман, хәҙерге заман, киләсәк заман.
29. Ҡылымдың йүнәлеш категорияһы: төп, ҡайтым, төшөм, уртаҡлыҡ, йөкмәтеү үнәлештәре. Ҡайтым, төшөм, уртаҡлыҡ һәм йөкмәтеү йүнәлештәренең яһалышы.
30. Ҡылым төркөмсәләре: исем ҡылым, уртаҡ ҡылым, сифат ҡылым, хәл ҡылым. Ҡылым төркөмсәләренең зат менән үҙгәрмәүе.
31. Исем ҡылым. Уның мәғәнәһе һәм яһалышы. Исем ҡылымдың исемгә оҡшаш яҡтары: уның һан, килеш һәм эйәлек заты менән үҙгәреүе.
32. Уртаҡ ҡылым. Уның мәғәнәһе һәм яһалышы. Уртаҡ ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ формаһы, синтаксик роле.
33. Сифат ҡылым. Сифат ҡылымдың заман формалары, синтаксик роле. Сифат ҡылымдың исем урынында ҡулланылыуы.
34. Хәл ҡылым, уның мәғәнәһе. Хәл ҡылымдың төрҙәре һәм синтаксик роле. Ҡылымдарға грамматик анализ.
35. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре һәм синтаксик билдәләре.
36. Башҡорт телендә рәүештәр яһалыуҙың төп ысулдары.
37. Рәүеш төркөмсәләре: хәл, ваҡыт, урын, күләм-дәрәжә, оҡшатыу-сағыштырыу, сәбәп, маҡсат рәүештәре.
38. Рәүеш дәрәжәләре, уларҙың яһалышы. Рәүештәргә грамматик анализ.
39. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә, уларҙың үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмаһы.
40. Модаль һүҙҙәрҙең мәғәнәләре. Модаль һүҙҙәрҙең килеп сығышы һәм уларҙың синтаксик функциялары. Модаль һүҙҙәрҙең төрҙәре.
41. Киҫәксәләр тураһында дөйөм төшөнсә. Киҫәксәләрҙең телмәрҙәге функцияһы.
42. Киҫәксәләрҙең бүленеше: һорау киҫәксәләре, көсәйтеү-раҫлау киҫәксәләре, сикләү киҫәксәләре.
43. Теркәүестәр тураһында дөйөм төшөнсә. Составы буйынса теркәүестәрҙең бүленеше: ябай һәм ҡушма теркәүестәр.
44. Теркәүестәр тураһында дөйөм төшөнсә. Мәғәнәләре буйынса теркәүестәрҙең бүленеше: теҙеүсе һәм эйәртеүле теркәүестәр.
45. Теҙеүсе теркәүестәрҙең төркөмдәре: йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү, аныҡлау теркәүестәре.
46. Эйәртеүле теркәүестәрҙең төркөмдәре: шарт, сәбәп, һөҙөмтә, оҡшатыу теркәүестәре
47. Бәйләүестәр тураһында дөйөм төшөнсә. Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге функцияһы.
48. Бәйләүестәрҙең бүленеше: төп йәки эйәлек килештәге һүҙҙәр менән килгән бәйләүестәр, төбәү йәки төп килештәге һүҙҙәр менән килгән бәйләүестәр.
49. Ымлыҡтар. Ымлыҡтарҙың телмәрҙәге функцияһы. Ымлыҡтарҙың бүленеше һәм дөрөҫ яҙылышы.

50. Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында дөйөм төшөнсә. Оҡшатыу һүҙҙәренең төрҙәре. Оҡшатыу һүҙҙәренең төҙөлөшө һәм уларҙың синтаксик функциялары

**зачтено – от 60 до 110 рейтинговых баллов (включая 10 поощрительных баллов)**
**не зачтено – от 0 до 59 рейтинговых баллов).**

**Рейтинг – план дисциплины *(при необходимости)***
**Морфология башкирского языка**
(название дисциплины согласно рабочему учебному плану)

Направление **Педагогическое образование (с двумя профилями подготовки)**
Направленность (профиль) подготовки **Иностранный язык**
Направленность (профиль) подготовки **Образование в области родного языка и литературы**
курс 5, семестр 9

| **Виды учебной деятельности студентов** | Балл за конкретное задание | Число заданий за семестр | Баллы | |
|---|---|---|---|---|
| | | | Минимальный | Максимальный |
| **Модуль 1** | | | | |
| **Текущий контроль** | | | | |
| 1. Практическое занятие | 2 | 4 | 6 | 8 |
| 2. Контрольная работа | 5 | 1 | 3 | 5 |
| 3. Индивидуальная работа | 3 | 1 | 1 | 3 |
| **Модуль 2** | | | | |
| **Текущий контроль** | | | | |
| 1. Практическое занятие | 2 | 4 | 6 | 8 |
| 2. Контрольная работа | 5 | 1 | 3 | 5 |
| 3.Индивидуальная работа | 3 | 1 | 1 | 3 |
| 3. Творческая работа | 1 | 2 | 0 | 2 |
| **Модуль 3** | | | | |
| **Текущий контроль** | | | | |
| 1. Практическое занятие | 2 | 4 | 6 | 8 |
| 2. Контрольная работа | 5 | 1 | 3 | 5 |
| 3. Индивидуальная работа | 3 | 1 | 1 | 3 |
| **Рубежный контроль** | | | | |
| 1. Тест | | | 30 | 50 |
| **Поощрительные баллы** | | | | |
| 1.Участие на олимпиадах / | | | | |
| 2. Публикация статей | 10 | 1 | 0 | 10 |
| **Посещаемость (баллы вычитаются из общей суммы набранных баллов)** | | | | |
| Посещение лекционных занятий | | | **0** | **–6** |
| Посещение практических (семинарских, лабораторных занятий) | | | **0** | **–10** |
| **Итоговый контроль** | | | | |
| 1. Зачет (дифференцированный зачет) | | | | |
| 2. Экзамен | | | | |
| | | | 60 | 110 |

## 5. Перечень основной и дополнительной учебной литературы, необходимой для освоения дисциплины

### 5.1 Основная учебная литература


1. Башҡорт теленең практик курсы. -Өфө: БДУ, 2002.–51 б.
2. Башҡорт теленең практик курсы: Практик дәрестәр өсөн күнегеүҙәр / төҙөүсеһе Н.А. Ласынова. – Өфө: БДУ, 2009.– 58 б.
3. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. - Өфө: Китап, 2005. – 264 б.

4. Хәҙерге башҡорт теле. Филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. - Өфө: Китап, 2011.

**5.2 Дополнительная учебная литература**

5. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. - Өфө: БДУ, 2002. – 388 б.
6. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теле. - Өфө: БДУ, 2001.
7. Әхтәмов М.Х., Ишбулатов Н.Х. Хәҙерге башҡорт теле. - Өфө: БДУ, 2002.

**5.3 Перечень методических указаний**

**5.4 Другие учебно-методические материалы**

**6. Перечень информационных технологий, используемых при осуществлении образовательного процесса по дисциплине, включая перечень программного обеспечения и информационных справочных систем**

1. tel.bashqort.com
2. strbsu.ru›wp-content/uploads/2013/05/pbash.pdf
3. ostaz.ru

**7. Описание материально-технической базы, необходимой для осуществления образовательного процесса по дисциплине**

| Наименование специализированных аудиторий, кабинетов, лабораторий | Вид занятий | Наименование оборудования, программного обеспечения |
|---|---|---|
| **1** | **2** | **3** |
| **Аудитория № 414** | Лекции | Учебная мебель, учебно-наглядные пособия, доска, стенд, трибуна, мультимедиа-проектор BenQ MX502, переносный напольный экран Appolo-t STM-1103, ноутбук Toshiba |
| **Аудитория № 414** | Практические занятия | Учебная мебель, учебно-наглядные пособия, доска, стенд, трибуна, мультимедиа-проектор BenQ MX502, переносный напольный экран Appolo-t STM-1103, ноутбук Toshiba |